**Яңауыл ҡалаһы И.Ш.Мөҡсинов исемендәге гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы**

## Ҡала мәктәбендә башҡорт(туған)теленән ФГОС шарттарында һөйләү телмәрен үҫтереү өсөн хәтер диктанты үткәреүҙең роле

Рус мәктәбендә башҡорт (туған)теленән ижади эшсәнлекте,логик фекерләү һәләтен үҫтереү, һөйләү телмәрен һәм яҙма телде байытыу,
хәтерен яҡшыртыу маҡсатында, 4-се класс уҡыусылары өсөн хәтер диктанты өҫтөндә эшләү түбәндәгесә алып барыла.
Был диагностик эш итеп алып барыла. Уҡыусылар өсөн норма менән шиғыр юлдары алына, унан һуң балаларҙың үҙләштереүҙәренә(хәтеренә) ҡарап арттырыла.
Уҡыусылар 8-10 минут ваҡыт эсендә шиғырҙы хәтерҙәрендә ҡалдырып дәфтәрҙәренә яҙып ҡуйырға тейештәр.
Шиғырҙы ятлау өсөн 4-5 минут ваҡыт бирелә.
Хәтер диктанты өҫтөндә эшләү өсөн түбәндәге текстарҙы ҡулланырға мөмкин.

1. Минең шундай дуҫтарым бар,
Дуҫтарым төрлө-төрлө,
Һәр береһе - ҙур яңылыҡ,
Һәр береһе - мең серле.

Мин ҡайҙа ғына барһам да,
Улар ҡаршыма сығыр,
Береһе әкиәт һөйләр,
Береһе һөйләр шиғыр. (С.Әлибай)

2. Әсәй кәрәк!

Көндәр яҡты булһын өсөн,
Әсәй кәрәк!
Аштар тәмле булһын өсөн,
Әсәй кәрәк!
Донъя йәмле булһын өсөн
Әсәй кәрәк! (Р.Миңнуллин)

3. Көҙ.
Ни арала йәй үткән,
Алтын көҙ килеп еткән .
Емештәр өлгөргәс, баҡса
Бигерәк тә матур икән! (Резеда Вәлиева)

4. Ватан.
Минең Ватаным
Океандарҙан киң,
Гүзәллеккә ул-
Сәскәләргә тиң.
Минең илемдә
Ҡояш та яҡты.
Йондоҙҙар ҙа шат,
Ер ҙә бик яҡшы.(М.Хәй)

5.
Башҡортостан!
Һин икмәкле тупраҡ,
Йәшел урман,болон,тау,дала.
Йәнһеҙгә–йән,
йәмһеҙгә-йәм биргән,
Һин ут һәм һыу,һауа һәм дауа. ( Н.Нәжми)

6. Тыуған илдә- барыбыҙ бер туған,
Бик ҡәҙерле беҙгә ул шуға.
Тыуған ил ул була бер генә,
Тыуған илдең ҡәҙерен бел генә. (З.Туфайлова)

7. Һәр кемдең бар өйө:
Көләс,яҡты,йылы.
Ғаилә усағы ул-
Атай,әсәй нуры.

Өй ул ил эсендә,
Ә ил беҙгә –Ватан.
Яҡлай,һаҡлай,бәпләй-
Ғәзиз Башҡортостан.

8. Тыуған илем.

Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым,
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан Уралым,-
Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем.(С.Юлаев)

9. Башҡортостан - ҡурай иле,
Башҡортостан - Урал ере,

Башҡортостан - ҡумыҙ теле,
Башҡортостан - ҡымыҙ сере. (Ә. Үтәбай )

10. Урал тигән дәү ҡарағай,
Оло солоҡ - Башҡортостан —
Мәңге йәшәр төйәгебеҙ,
Тарих беҙгә шулай ҡушҡан,
Яҙмыш үҙе шулай ҡушҡан.(Р. Ҡол-Дәүләт )

**Хәтер диктанты** өҫтөндә эшләгәндә уҡыусыларға диагностик карта,индивидуаль  диагностик карта,баһалау нормалары тәҡдим ителә.
Үҙбаһа.
**“Райтинг” алымы.** Үҙ хеҙмәтеңде  баһаларға өйрәнеү.

(Уҡыусы үҙенең эшенә баһа ҡуя.Уҡытыусы кәсер һаны аша үҙ баһаһын ҡуя.)

---

**Баһалау нормалары**

| ай | “5” | “4” | “3” |
|---|---|---|---|
| | Һүҙҙәр һаны | | |
| сентябрь | 12 | 10 | 8 |
| октябрь | 15 | 11 | 9 |
| ноябрь | 16 | 12 | 9 |
| декабрь | 18 | 14 | 11 |
| январь | 19 | 16 | 12 |
| февраль | 20 | 17 | 14 |
| март | 22 | 18 | 15 |
| апрель | 23 | 20 | 17 |
| май | 25 | 22 | 19 |

Һәр бер дәрестә һүз һаны үҙгәрә ,шуға күрә  баһалау нормалары ла үҙгәрә.

**Һүҙ хатаһы**

Хатаһыҙ,таҙа - “5”
2 хата –“4”
3-5 хата – “3”
6 хата – “2”

**Индивидуаль диагностик карта**

**Ф.И.**___________________________________

| ай | дата | һүҙ һаны | һүҙ хатаһы |
|---|---|---|---|

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | |
| | | | |
| | | | |

3-сө бағанала хәтерҙә ҡалдырылған һүҙҙәр һаны өсөн ,4 –се бағанала һүҙҙәрҙә ебәрелгән хаталар өсөн билдә ҡуйыла.